*Нәзир ҠОЛБАХТИН,*
*тарих фәндәре докторы*



# Нуғай даруғаһының башҡорт юлбашсылары

*Нуғай даруғаһы башкорттары Крәҫтиәндәр һуғышына бер төркөм талантлы юлбашсылар биргән. Уларҙан Кинйә Арыҫланов, Ҡаскын Һамаров, Ҡаранай Моратов Крәҫтиәндәр һуғышының ҙур хәрби етәкселәре кимәленә күтәрелә. Кинйә башкорт полкының баш полковнигы һәм атаманы, Пугачевтың иң якын көрәштәше була. Ҡаскын менән Ҡаранай үҙаллы башкорт төбәктәрен ойоштора һәм етәкселек итә.*

*Нуғай башкорттарынан йәмғеһе 14 полковник һәм 2 атаман сыға. Уларҙың күбеһе ихтилалға тәүҙә үк кушыла, мөһим урынды тота һәм азатлык хәрәкәтенә аҙағынаса тоғро кала. Кинйә менән уның улдарынан, Ҡаскын менән Ҡаранайҙан башка, Нуғай даруғаһының башкорт юлбашсыларының был төркөмөндә Ҡанбулат Юлдашев, Буҙан Аҙмаков, Төркмән Йәнсәйетов, Турай Ишәлин дә бар.*

## Турай Ишәлин

Турай Ишәлин — Сөбәй-Мең олоҫоноң йөҙ башлығы (сотник). Ихтилалға 1773 йылдың ноябрендә ҡушыла. Ноябрҙең һуңғы көндәрендә, Өфө Ҡасҡын Һамаровтың сиреүҙәре менән ҡамап алынғанда, Турай Ҡазан һәм Нуғай даруғалары башҡорттары, татарҙары, мариҙары һәм рустарына уның ғәли йәнәптәренә ”хеҙмәт күрһәтергә”, ”көстө йәлләмәҫкә” саҡырып мөрәжәғәт итә[1]. Уның был өндәмәһенән меңдән ашыу кешелек баш күтәреүселәр отрядына етәкселек итеүен, уның командаһында старшиналар һәм поход старшиналары Мәксүт Үтәгәнов, Иҡсан Баязитов, Батырша, Сәйетбаттал Мәсәлимов, Ғәли Хөсәйенов, Әбделкәрим Мәксүтов, Уложенный комиссия депутаты Әбделйәлил Мәксүтов, муллалар Сәлим Мостафин һәм Сөләймән, мариҙар управителе Байҡы Үмәркәев һуғышҡанын белеп була. Отрядтың туптары булмай. Шуға

Турай ”дошманды ҡыҫыу” өсөн ”батша мәрхәмәтенән” бер нисә туп ебәреүҙәрен үтенә. Турай ”был йома Өфөнө туҙҙырырға ниәт тотабыҙ”, тип белдерә һәм ”шул һуғыш өсөн һәр ихатанан берәр мылтыҡлы казак әҙерләргә” бойора[2].

Турай Өфөгә үҙенең отряды менән имен-аман барып еткәндер, күрәһең. Өфө коменданты канцелярияһы журналында былай тиелгән: ”Өфөнө ҡамауҙа баш күтәреүселәр армияһына ярҙам итеп, яуызлыҡҡа өндәүселәр яһаҡлы татарҙар старшинаһы Ибраш Ураҙбахтин менән старшина, полковник Турай Ишәлин булдылар”[3]. Турайҙың Ҡасҡын, Ҡанбулат һәм Ибраш менән бергә Өфө янындағы баш күтәреүселәр армияһының етәкселәр даирәһенә инеүе, ҡамауҙағыларға ”батша Петр Өсөнсөнө” таныуҙарын һәм ҡаланы ҡан түкмәйенсә тапшырыуҙарын талап итеп хаттар ебәреүе хаҡында һаҡланып ҡалған бихисап документтарҙа яҙылған[4]. 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышын өйрәнеүсе ҙур ғалим А.И.Андрущенко ла Турайҙың Өфөнө ҡамауҙа мөһим урын тотоуын таный[5].

Турай Ишәлин 1774 йылдың яҙындағы фажиғәле көндәрҙә лә рух ныҡлығын һәм ихтилалға тоғролоҡ һаҡлаған. Ул 1774 йылдың йәйендә лә көрәште дауам иткән. Старшина Муса Иманғоловтың Ырымбур губернаторы И.А.Рейнсдорпҡа 1774 йылдың 19 июлендә хәбәр итеүенсә, Турай ихтилал полковниктары Ҡасҡын, Ҡотлогилде һәм Буҙан менән бергә ”бер мең ярым кешелек” ҡатнаш отряд башында Бөгөлсән ауылы тирәһендә, йәғни Нуғай даруғаһының көньяҡ өлөшөндә хәрәкәт иткән[6].

Турайҙың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Тикшереү документтарында уның исеме осрамай. Ул ярлыҡау һорап килеүселәр йәки язалаусылар яғына күсеүселәр араһында ла иҫәпләнмәй. 1774 йылдың йәйендә уның баш күтәреүселәр хәрәкәтенән китеүе ихтимал. Тарихсыларҙы һәм тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙе 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының мең башҡорттары араһынан сыҡҡан ошо ҙур юлбашсыһының артабанғы яҙмышын асыҡлау буйынса ҙур эш көтә.

## Төркмән Йәнсәйетов

Баш күтәреүсе башҡорттарҙың иң әүҙем һәм эҙмә-эҙлекле етәкселәренең береһе Бөрйән олоҫоноң отставкалағы старшинаһы Төркмән Йәнсәйетов була. Ҡыҙыл ҡәлғәһе коменданты майор П.Демидов 26 октябрҙә бригадир Корфҡа, Пугачев Төркмән старшинаны үҙенә шәхси һөйләшеү өсөн саҡыра, тип хәбәр итә. Төркмән Берда лагерына 1773 йылдың октябрь аҙағында килә. Командаһында 39 ихата ғына булһа ла, ул ҙур һәм күп һанлы отряд туплағандыр, күрәһең[7]. Пугачев уға полковник чинын бирә һәм Ырымбурҙың төньяғын күҙәтеү бурысын йөкмәтә[8]. Полковник О.Х.Демарин 1773 йылдың 21 ноябрендә губернатор Рейнсдорпҡа яҙған рапортында: ”Төркмәнгә ул, яуыз, Орскиҙан алып Үрге Яйыҡҡа тиклем арала командаларҙы, хаттарҙы үткәрмәҫкә, тотоп алып ҡалырға бойорҙо”, тип хәбәр итә[9].

Төркмән дә 1774 йылдың йәйендә көрәште туҡтатмай. 2 июндә башҡорт Ғүмәр Антыков И.Л.Тимашевтың поход канцелярияһында күрһәтеүенсә, Төркмән Морат Апталов һәм башҡа башҡорт командирҙары менән бергә Уртазым ҡәлғәһен ала, һалдаттарҙы һәм обывателдәрҙе ҡыра, ҡәлғәне яндыра, 2 баҡыр тупты һәм 15 бот дарыны тартып ала[10]. Әҙ генә һуңғараҡ, 5 июндә, Тимашев генерал Голицынға 20 май тирәһендә уның командаһына ике тапҡыр һөжүм итеүҙәре хаҡында рапорт бирә. 3 июндә баш күтәреүселәр йәнә Тимашевҡа һөжүм итә. Тимашевтың раҫлауынса, барлыҡ был һуғыштарҙа баш күтәреүселәр отрядының командиры Төркмән була[11].

Пугачев полковнигы Төркмән 1774 йылдың ҡара көҙөнә тиклем көрәште дауам итә. Ул 25 ноябрҙә Таулыҡай ауылы янында башҡорт полководецтары Ҡаранай һәм Ҡасҡын менән бергә коллегия советнигы Тимашевҡа әсир төшә[12]. Тимашев уларҙы Исәт провинцияһында штраф провиантын йыйыуҙа файҙалана. Аҙаҡ Төркмән Нуғай даруғаһының 21 башҡорт старшинаһы иҫәбендә Әлибай тарафынан Өфөгә ебәрелә, ә унан Ҡазан Йәшерен комиссияһына алып барыла[13]. Комиссияла Төркмәндең Пугачевта полковник булып хеҙмәт итеүе асыҡлана[14].

1775 йылдың яҙына тиклем Төркмән комиссия колодниктары иҫәбендә була, унан һорау алына. Һәм Екатерина Икенсенең 1773 йылдың 29 ноябрендәге манифесы нигеҙендә хөкөм ителмәйенсә иреккә ебәрелә[15].

Әхтәр Тимерйәрҙең яңыраҡ ҡына нәшер ителгән китабында Төркмән Йәнсәйетов тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар. 1811 йылғы ревизия материалдары буйынса Төркмән әле иҫән, уға 80 йәш була. Уның бер улы — 43 йәшлек Яманһарт — 1816 йылда старшина, 44 йәшлек улы Яманғол Төркмәнов старшина ярҙамсы булып хеҙмәт итәләр. Өлкән улы Һөйәрғолға был ваҡытта 60 йәш булған[16].

## Ҡанбулат Юлдашев

Ҡанбулат Юлдашев — Тамъян олоҫоноң поход старшинаһы. Баш күтәреүселәр хәрәкәтенә тәүге көндәрҙән үк ҡушыла. Кинйәнең башҡорт полкында Ырымбур эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнаша. Был хаҡта 1773 йылдың ноябрендә Кинйә атаман баш күтәреүсе старшиналар Ҡанбулат Юлдашев менән Хоҙайназар Теләүбирҙинға биргән ордерҙа әйтелә: ”Беҙҙең ғәли йәнәптәренең дошмандарын, шулай уҡ полктарҙы һәм баярҙарҙы хәлегеҙҙән килгәнсе ҡырығыҙ”[17]. 1774 йылдың ноябрендә Ҡанбулат Ҡасҡындың баш күтәреүселәр ғәскәрендә Ырымбур эргәһенән Өфөгә киткәндер, күрәһең, аҙаҡ Стәрлетамаҡ пристанен, Табын ҡәлғәһен һәм Богоявленск заводын һөжүмгә тотоуҙа ҡатнашҡан. 1774 йылдың ноябрь аҙағында—декабрҙең тәүге яртыһында Ҡасҡын Турай Ишәлин менән бергә Өфөнө ҡамауға етәкселек итә. Был хаҡта бер нисә документ һөйләй. 12 декабрҙә ул Ҡасҡын һәм Ибраһим менән берлектә Ҡазан даруғаһының Йылан олоҫо старшиналарына һәм йөҙ башлыҡтарына баш күтәреүселәр отрядтарын ойошторорға ҡушып,

указдар тарата[18]. Хәрби коллегияның Иван Зарубинға 20 декабрҙә ебәргән указында Ҡанбулат Ҡасҡын менән йәнәшә Чесноковка баш күтәреүселәр үҙәгенең етәксеһе тип таныла һәм милләт-ара ыҙғыш тыуҙырыуҙа ғәйепләнә[19]. Чесноковкаға Зарубин килгәс тә Ҡанбулат командирҙар араһында ҡала, Зарубин һәм Ҡасҡын менән бергә поход канцелярияһынан сыҡҡан документтарға ҡул ҡуя[20].

1774 йылдың яҙында ла Ҡанбулат көрәште туҡтатмай, властарға ғәйебен танып килмәй. Йәйен Ҡасҡын һәм башҡа командирҙар менән бергә Нуғай даруғаһы биләмәләрендә ихтилал эшмәкәрлеген йәйелдерә. Крәҫтиәндәр һуғышының тәүге осоронда көрәштәштәр, ә йәйгә хөкүмәт мәғлүмәтселәре булып киткән Ҡәйеп Зыямбәтов менән Ибраһим Мерәсев ”тоғро” мишәр старшинаһы Ишмөхәмәт Сөләймәновҡа 1774 йылдың 24 июлендә ебәргән рапортында ”ә Ҡаранай, Ҡанбулат һәм Кинйә абыздың энеһе Ҡотлогилде, Кинйәнең улы Һеләүһен, алты йөҙләгән башҡортто йыйып, Ҡандракүл йылғаһының үрендә торалар”, тип хәбәр итәләр[21]. Ҡанбулаттың әүҙем хәрәкәттәре хаҡында властар ҙа белә. 13 июлдә, татар ошаҡсыһы Хәмзә Усмановтың мәғлүмәттәренә таянып, Өфө провинцияһы канцелярияһы Ырымбур губернаторы И.А. Рейнсдорпҡа, Өфөнән көньяҡтараҡ, Ҡарамалы ауылында башҡорттар Ҡанбулат менән Ҡотлогилде һәм татар Аллағол Аҡаев етәкселегендә 200 кешене йыйып, ”тоғро” старшиналар Ҡыҙрас, Әлибай, Ҡәйеп һәм Ибраһимға көстәрҙе берләштерергә һәм Өфөгә яу ойошторорға тәҡдим яһап, кешеләр ебәрҙеләр[22].

Ҡанбулат Юлдашевтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ һәм ғәйебен танып килеүселәр менән Ҡазан Йәшерен комиссияһында тикшерелеүселәр араһында уның исеме телгә алынмай.

## Буҙан Аҙмаҡов

Баш күтәреүселәр полковнигы Буҙан Аҙмаҡов хаҡында материалдар тағы ла аҙыраҡ. Крәҫтиәндәр һуғышына тиклем ул Һарайлы-Мең олоҫо Аҙнай ауылының йөҙ башлығы булған. Ихтилалға тәүҙә үк ҡушылған. Ҡасҡын менән Ырымбурҙан Өфөгә тиклем барған. Стәрлетамаҡты, Табынды алыуҙа ҡатнашҡан. Баш күтәреүселәр армияһы полковниктары Ҡасҡын, Ҡаранай, Ҡыҙрас, Ҡанбулат, Турай һәм Нуғай даруғаһының башҡа старшиналары менән бергә Өфөнө ҡамауҙы ойоштора. Һуңынан Көнбайыш Башҡортостанға юл тота, Ҡаранайҙың ғәскәрендә һуғыша. Баш күтәреүсе Измаил Туҡтамышев Ҡазан Йәшерен комиссияһында күрһәтеүенсә, уны татар ауылы Ҡурсыла ”яуыз башҡорттар” тотоп бәйләй һәм Мөлөк исемле татар ауылына старшина Буҙанға килтерә, ә ул уларҙы Бикбау ауылына, мең кешелек ғәскәре менән шунда туҡталған башҡорттарҙың баш полковнигы Ҡаранай Моратовҡа ебәрә[23]. Круглое поле ауылы священнигы Илья Дмитриев тәфтишсегә яуап биргәндә, священник Патрикеев һәм уның улы менән бергә Илбахты ауылынан татарҙарҙың Күлек ауылына ”башҡорт полковниктары Тобуз менән Годзалға һоло алып барыуҙарын”

əйтə. Тегеләр уларҙы: ”Үҙегеҙ килеп яҡшы иткәнһегеҙ”,—тип маҡтай. Юл билетын һорауға полковниктар:” ”Көтөп торогоҙ, һеҙҙең ауылдан батшаға хеҙмәткә дүрт ихатанан берәр кеше алырға кәрәк”, — тип яуап бирә һәм, билет биреп, уларҙы крәҫтиәндәрҙе баш күтәреүселәр отрядына яллау өсөн өйҙәренә ҡайтарып ебәрә. Билетты есаул Муса бирә[24]. 1774 й. йәйендә Буҙан Дим һәм Өршәк йылғаларының үрге ағымында хәрәкәт итә, Турай, Ҡотлогилде һәм Ҡасҡын менән бергә Өфөгә яу әҙерләй[25]. 1774 й. көҙөндә ул Әлибайҙың өгөтләүе буйынса Өфө провинцияһы канцелярияһына ғәйебен танып килә[26]. Шунан Буҙан Ҡазан Йәшерен комиссияһына ебәрелә. 1774 й. 24 декабрендәге комиссия ҡарары буйынса, Ҡыҙрас Муллаҡаев, Илсеғол Таймасов һ. б. менән бергә, йәмғеһе 13 кеше, язаһыҙ азат ителә һәм, билет биреп, йортона ҡайтарыла[27].

Нуғай даруғаһының башҡорт юлбашсыларына берләштерелгән ҙур баш күтәреүселәр ғәскәрҙәре башында бергә һуғышҡа инеү хас булған. 1773 й. ноябрь аҙағында 4 меңлек ғәскәргә Тамъян олоҫоноң поход старшиналары Ҡасҡын Һамаров һәм Ҡанбулат Юлдашев, Бөрйән олоҫоноң йөҙ башлығы Ҡаранай Моратов, Һарайлы-Мең олоҫонан Буҙан Аҙмаҡов һәм Сөбәй-Мең олоҫонан Турай Ишәлин етәкселек итә. Был ғәскәр юлбашсылары араһында шулай уҡ Ҡара-Табын олоҫо старшиналары Ҡыҙрас Муллаҡаев менән Ҡәйеп Зыямбәтов, Өршәк-Мең олоҫо старшинаһы Ибраһим Мерәсов тә була. Декабрь башында Ҡаранай, Ҡыҙрас, Буҙан һәм Ибраһим Көнбайыш Башҡортостанға китә һәм Минзәлә төбәгендә ҙур айырым отрядтарға етәкселек итә, ә Ҡаранай был яҡта танылған ихтилал юлбашсыһына әйләнә. Ҡасҡын, Ҡанбулат, Турай Өфө янында ҡала һәм дүрт ай буйы ҡаланы ҡамауҙы етәкләй. Пугачев эмиссары Иван Зарубин-Чика Чесноковкаға килгәндән һуң да улар Башҡортостандың үҙәгендә ихтилал юлбашсылары булып ҡала. Зарубинға ебәрелгән Пугачев манифестарында һәм Хәрби коллегия указдарында Өфө провинцияһының ғәйәт киң биләмәләрендә уларҙың ихтилалға етәкселек итеүе асыҡ сағыла[28].

1774 йылдың йәйендә Ҡасҡын, Ҡаранай, Ҡанбулат, Турай, Ҡотлогилде, Һеләүһен һәм Буҙан Нуғай даруғаһы сиктәрендә әүҙем һәм берҙәм көрәш алып бара. Ҡаранай отрядтары Стәрлетамаҡ пристане, Ашҡаҙар һәм Стәрле йылғалары бассейндарында хәрәкәт итә. Унан көньяҡтараҡ, Бөгөлсән ауылы тирәһендә Ҡасҡын отрядтары һуғыша. Нуғай даруғаһының көньяғында, Яңы Мәскәү юлы төбәгендә Ҡотлогилде менән Һеләүһен отрядтары ылауҙарға, ҙур булмаған язалау отрядтарына һөжүм итә. Буҙан менән Турай отрядтары Дим һәм Өршәк йылғаларының үрге ағымы бассейндарында полковник Кожиндың язалаусылары һәм ”тоғро” старшиналар командалары менән һуғыша. Һаҡланып ҡалған сығанаҡтарҙан уларҙың даими бәйләнеш тотоуы мәғлүм, ҙур язалау көстәренә ҡаршы хәрби операциялар үткәреү өсөн улар йыш ҡына отрядтарын бер ғәскәргә берләштергән. Мәҫәлән, 19 июлдә старшина Муса Иманғолов Ҡотлогилде, Ҡасҡын, Буҙан һәм Турай етәкселегендә 1500 кешелек ҡатнаш отряд ойошоуын хәбәр итә[29].

Улар көрәште Нуғай башҡорттарынан булған, хәҙер хәрәкәттән ситләшкән элекке Пугачев полковниктары Ҡыҙрас, Илсеғол һәм Әлибай менән башлаған[30]. Ул саҡта, 1774 йылдың 24 июлендә, Өфө провинцияһы канцелярияһы П.М.Голицынға рапорт биреп, тәрән борсолоу менән түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: ”... беҙгә мәғлүм булыуынса, яуыздар Ҡаранай Моратов, Ҡанбулат Юлдашев һәм Ҡәнзәфәр Усаев, меңгә яҡын кешене йыйып, пристандән үрҙәрәк, Ағиҙел менән Ашҡаҙар араһында, далала торалар, Өршәк менән Дим араһындағы ауылдарҙы ҡырырға йыйыналар, тиҙәр”[31].

Өфөгә яу ойоштороу иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе була. Пугачев бригадиры Ҡәнзәфәр күрһәтмәләр биргәндә провинцияның хакимиәт үҙәгенә шундай поход әҙерләнеүе һәм уның ойоштороусылары араһында Ҡасҡын, Һеләүһен һәм Нуғай даруғаһының башҡа старшиналары булыуы хаҡында һөйләй[32]. Ҡәйеп менән Ибраһимдың мишәр старшинаһы Ишмөхәмәт Сөләймәновҡа 1774 й. 24 июнендә яҙған рапортында ”Ҡандракүл йылғаһының үрендә” Ҡаранай, Ҡанбулат, Ҡотлогилде һәм Һеләүһенде̌ң ҡатнаш отряды ойошоуы тураһында әйтелә. Улар менән берләшергә 400 ҡалмыҡ һәм 200 Яйыҡ казагы килә[33]. 18 июндә Өфө провинцияһы канцелярияһы Ырымбур губернаторы Рейнсдорпҡа, Өфөнән 60 саҡырым алыҫлыҡта ”башҡорттар ойоша, үҙҙәренең яуызлыҡтарына бүтәндәрҙе лә ҡушырға ынтыла, бының өсөн тирәяҡҡа йомошсолар ебәрә һәм Өфөгә яу менән барырға йыйына”, тип хәбәр итә[34]. Татар Хәмзә Усмановтың рапортҡа өҫтәмәһендә әйтелеүенсә, Ҡарамалы ауылында ”башҡорттар Ҡанбулат һәм Ҡотлогилде менән татар Аллағол Аҡаев” етәкселегендә 200 кешелек баш күтәреүселәр отряды пәйҙә була. Командирҙар үҙҙәренең отрядтарын тирәяҡтағы ауылдарҙың халҡы менән тулыландыра, старшиналар Ҡыҙрас, Ҡәйеп, Әлибай һәм Ибраһимға өгөтләүселәр ебәрә, ҙур ғәскәр йыйғас, Өфөгә яу асырға ниәтләнә[35].

Берләштерелгән ихтилал көстәрен Өфөгә алып барыу өсөн бер нисә аҙым яһала. Нуғай даруғаһы старшиналары Аҡкөсөк Таиров, Үтәгән Мушев һәм башҡаларҙың 3 мең кешелек отряды Өфөгә юллана. 28 июндә Алмантай ауылы янында, Чесноковка тирәһендә, был отрядты полковник А.Я.Якубовичтың корпусы ҡыйрата. Әсир ителгән 6 баш күтәреүсе 2 июлдә Өфөлә аҫып үлтерелә[36]. Нуғай даруғаһының башҡорт юлбашсыларының ҙур ғына төркөмө 1774 й. ҡара көҙөнә тиклем эҙмә-эҙлекле һәм ныҡышмал көрәшә. Ҡаранай, Ҡасҡын, Ҡотлогилде, Һеләүһен, Төркмән 1774 й. 25 октябрендә коллегия советнигы И.Л.Тимашевҡа әсир төшә[37]. Крәҫтиәндәр һуғышында әүҙем ҡатнашыусы башҡа ихтилалсылар менән бер рәттән улар ҙа Өфө провинция канцелярияһына ғәйебен танып килә[38]. Уларҙы Ҡазан Йәшерен комиссияһына ебәреп, язалап һорау алалар. Әммә Екатерина Икенсенең 1773 йылдың 29 ноябрендәге манифесына ярашлы, үҙ ирке менән ғәйебен танып килеүселәр булараҡ, хөкөм ителмәйенсә иреккә ебәреләләр[39].

Нуғай даруғаһы башҡорт старшиналарының бер төркөмө Крәҫтиәндәр һуғышында бер туҡтауһыҙ икеләнә. Ихтилалдың башында уҡ, халыҡ әүҙем күтәрелгәндә, улар баш күтәреүселәр үҙәгенә килә һәм ихтилалсылар отрядтарын етәкләй. Күбеһе Пугачевтан полковник чины ала. 1774 й. яҙында Төп ғәскәр һәм көстәр ҡыйратылғас, улар ихтилалдан ситләшә. Ҡайһы берәүҙәр язалаусылар яғына күсә һәм һуғыш тамамланғансы уны баҫтырыуҙа әүҙем ҡатнаша. Әммә күпселек урталыҡты һайлай һәм ихтилал яңынан ҡыҙа башлау менән йәнә баш күтәреүселәр яғында көрәшә, бер ни тиклем ваҡыт хатта командир ҙа булалар. Пугачев менән Төп ғәскәр Ҡазан менән Волга аръяғына китеп юғалыу менән улар тағы ихтилалға хыянат итә һәм хатта уны баҫтырыуҙа тырышлыҡ күрһәтәләр.

Улар араһында Ҡырҡүл-Мең олоҫо старшинаһы, Нуғай даруғаһының баш старшинаһы Әлибай Мырҙағолов айырылып тора.

## Әлибай Мырҙағолов

Әлибай Ҡыркүл-Мең олоҫо башҡорто була. Уның атаһы Мырҙағол Абысовты 1737 йылда язалаусылар сабып үлтерә. Ҡыҙрас Муллаҡаевтың капитан П.А.Батовҡа 1737 йылдың 3 июлендә яҙған хатында былай тиелә: ”... Килмәк мулланы... 75 кешене тәүбәгә килтереп, ҡырҙылар, штраф аттарын биргән 80 кешене лә ҡырҙылар, улар араһында Юрматы олоҫо башлығы Һөйәрғол Черамышковты, Нуғай даруғаһы Күл-Мең олоҫонан Мырҙағол Абысовты”[40].

1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы башланыуға Әлибай Мырҙағолов өлкән йәштәге кеше булған. 1759 йылдың 31 декабрендә Өфө провинцияһы канцелярияһына старшина Әлибай Мырҙағоловтың башҡорт ерҙәрендә мишәрҙәрҙе һәм татарҙарҙы урынлаштырыуға ризаһыҙлыҡ белдергән рапорты килеп ята[41]. Рапортта бер нисә Меңле олоҫо мишәрҙәренә һәм татарҙарына рөхсәтһеҙ ер бүлеү тураһында аныҡ материалдар бар, ә Әлибайҙың үҙенең олоҫо күрһәтелмәй. Был ваҡытта уҡ ул Нуғай даруғаһының баш старшинаһы вазифаһын үтәгәндер, күрәһең. Документ аҫтына: ”Әлибай Мырҙағолов тамғаһын һалды”, тип өҫтәп яҙылған[42]. Тимәк, Әлибай яҙа белмәгән.

Әлибай башҡорттар араһында киң танылыу һәм ҙур абруй менән файҙаланған. Документтарҙа уны Нуғай даруғаһының ”баш старшинаһы” тип атайҙар. Уложенный комиссияға депутаттар һайлау һәм наказдар төҙөү ваҡытында ул Өфө провинцияһы башҡорттарының депутаты Туҡтамыш Ишбулатовтың ышаныслы кешеһе була. 1767 й. башында Өфө провинцияһының барлыҡ олоҫтары вәкилдәре наказ төҙөү өсөн ғаризаларын, ”хөкөмгә тарттырылмаған, шик тыуҙырмаған, ошаҡта, башҡа кәмселектәрҙә ғәйепләнмәгән кеше буларак”, Әлибайға тапшырғандар[43]. 23 мартҡа ул 15 пунктлыҡ наказдар проектын төҙөүҙе тамамлаған һәм Туҡтамыш Ишбулатовҡа тапшырған[44].

Крәҫтиәндәр һуғышы башланғас, Әлибай ауыр хәлдә тороп ҡала. Уның командаһындағы башҡорттар баш күтәреүселәр яғына үҙаллы сыға, уларҙан 700 кеше Берда лагерына килә[6]. Баш күтәреүселәр үҙәге, Әлибайҙың абруйын иҫтә тотоп, тәүге манифест менән уға мөрәжәғәт итә. Ҡарғалының сауҙагәр татарҙары старшинаһы Муса Әлиев күрһәтеүенсә, 1 октябрҙә башҡорттарға яҙылған манифестың өс данаһының берәүһен Айсыуаҡ ауылы муллаһы Яҡшый аша Әлибайға ебәрәләр[7].

Әммә Өфө провинцияһы канцелярияһы Әлибайҙы капитан И.Г.Ураковтың ойошоп ятыусы Стәрлетамаҡ башҡорт-мишәр язалау корпусының командир урынбаҫары итеп тәғәйенләй. Пугачев штабы Әлибай менән бәйләнеште өҙмәй. Башҡорт полкы атаманы Кинйә уға ”Сер һаҡлаусым, дуҫ!” тип мөрәжәғәт итеп хаттар яҙа, ”батша Петр Федоровичҡа” — Пугачевҡа башҡорт, казак һәм башҡа полководецтарҙың ағылыуы хаҡында хәбәр итә[47]. Пугачев бөтә башҡорттарҙы һәм старшиналарҙы үҙенә хеҙмәт итергә, дошмандарға ҡаршы ҡыйыу көрәшергә саҡырып, уға исемле манифест ебәрә. Һәм:”...кем мине тыңламай, шул язаға тарттыраласаҡ”,—тип янай[48].

Әлибай ике яҡлы уйын алып барырға мәжбүр була. Ихтилалсыларға теләктәшлек белдереүенә ҡарамаҫтан, Кинйәнең хаттарын һәм Пугачев манифестарын ул Ураковҡа тапшырған. Һөҙөмтәлә хәрби һәм урындағы граждандар властары Башҡортостандағы ваҡиғаларҙы белеп торған. Атап әйткәндә, Өфө провинцияһы канцелярияһы 1773 й. 28 октябрендә Ырымбур губернаторына ебәргән йәшерен рапортында, капитан Ураков Кинйәнең Әлибайға ебәргән хаты аша Урал аръяғындағы 11 башҡорт старшинаһының Пугачевҡа баш һалыуын белгән, тип хәбәр итә[49].

Ләкин Әлибай менән Кинйәнең хат алышыуын Стәрлетамаҡ корпусындағы башҡа старшиналар, рядовой башҡорттар һәм мишәрҙәр ҙә белгән, Пугачев һәм Ырымбур янындағы ваҡиғалар тураһында хәбәрҙар булған. Был хәл ни кимәлдәлер корпустың ҡуҙғыуына булышлыҡ иткән. Өфө воеводаһы майор П.Н.Богданов 1773 й. 29 декабрендә Өфө провинцияһы канцелярияһына Юрматы олоҫо старшиналары Сайран Сәйетов менән Күҫәпҡол Азатов командаларындағы башҡорттарҙың Әүжән-Петровск заводы крәҫтиәндәренә төбәп атыуҙан баш тартыуҙары, майор Н.Голов менән Әлибайҙы уратып алып, ”сәнсеп” үлтерергә янауҙары тураһында мәғлүмәт ебәрә[50].

Әлибай 1773 йылдың 10 ноябрендә Бикҡол ауылы янында Стәрлетамаҡ башҡорт-мишәр язалау корпусының 1200 атлыһы менән баш күтәреүселәр яғына сыға[51].Ошо ҙур команда составында ихтилалсылар яғына сыҡҡан, ул мәлдә Әлибай Мырҙағоловтоң ҡулы аҫтында булған Салауат Юлаев Сенаттың Йәшерен экспедицияһында 1775 йылдың 25 февралендә биргән күрһәтмәләрендә ул ваҡиғаларға Әлибайҙың етәкселек итеүен ышаныслы һәм шик ҡалдырмаҫлыҡ итеп хәбәр итә:”...башҡорттар һәм мишәрҙәр, йәмғеһе 1200 кеше, башҡорт старшинаһы Элвий (Әлибай. — Н.Ҡ.) етәкселегендә Бикҡол ауылы-

на генерал Карға... Әммә барып етергә бер саҡырым ҡалғас, уларға ике мең йәки күберәк кешелек яуыздар төркөмө туптар менән һөжүм итеп, ҡараңғы төшкәнсе тота. Шуға күрә старшина Элвий, үҙенең ҡаршы торорлоҡ туптары ла булмағас, ... ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә яуыздарға баш бирә"[52]. Әлибай командалығындағы партияның 10 ноябрҙә әсир төшөүе хаҡында генерал Кар ҙа хәбәр итә[53]. Берда лагерында Әлибай Кинйәнең башҡорт полкында хеҙмәт итә. Пугачев уға полковник чинын бирә, атаман итеп тәғәйенләй. Күрәһең, башҡорт полкы атаманы Кинйә күберәген Пугачев штабында уның кәңәшсеһе сифатында хеҙмәт иткәндер, ә Әлибай башҡорт полктарында һуғышҡандыр, ҡалаға һөжүмдәр ойошторғандыр, дошман көстәренә ҡаршы торғандыр. Әлибайҙың Берда лагерында мөһим урын тотоуына түбәндәге мәғлүмәт тә асыҡлыҡ индерә. Ҡазан Йәшерен комиссияһында Уса даруғаһы Уран олоҫо Юбакаево ауылы башҡорто Мяди Мидияров Берда лагерында "атаман Әлибай Мырҙағоловтың уға старшина чинын биреүен" хәбәр итә[54]. Хәрби коллегия урынлашҡан ихтилал үҙәгендә Пугачев менән Кинйәнән башҡа үҙаллы эш итеү хоҡуғы булған бик ҙур полководец ҡына шундай яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә һала алған.

Берда лагерында һәм башҡорт полкында ғына түгел, ә барлыҡ башҡорттар араһында Әлибайҙың ҙур абруй яулауы тураһында түбәндәге ваҡиғалар һөйләй. 1774 йылдың мартында баш күтәреүселәр армияһының Минзәлә тирәһендә хәрәкәт итеүсе бер төркөм башҡорт полковниктары Ҡыҙрас, Ҡәйеп, Моратша һәм башҡалар Хәрби коллегияға рапорт менән мөрәжәғәт итеп, "бында атаман Әлибай Мырҙағоловты ебәрегеҙ, сөнки халыҡ тыңлаған һәм халыҡҡа таяныс булырлыҡ бүтән баш түрә бында юҡ", тип үтенә[55]. Пугачев Зарубин армияһының Өфө янында ҡыйратылыуын белгәс, унда ла Әлибайҙы ебәрергә ҡарар итә. Уны оҙатып барыусы Әлмәкәй Әлкәев комиссияла, Пугачев "теге тотолған Чика урынына старшина Әлибай Мырҙағоловты (ул уның эргәһендә баш ине) юлландырҙы, Әлибай тиҙерәк Өфөгә һөжүм ойошторһон һәм нисек тә баҫып алырға тырышһын өсөн указ бирҙе", тип күрһәтмә бирә[56].

Был указ менән Әлибай март аҙағында Берда лагерынан Чесноковкаға юллана. Әлибайҙы Әлмәкәй оҙатып бара, ул уны Өфө провинцияһы канцелярияһына ғәйебен танып барырға күндерә. Әлмәкәйҙең һөйләүенсә, улар провинция канцелярияһына 1774 йылдың 9 апрелендә барып инәләр[57]. Подполковник Михельсон 7 апрелдә генерал-аншеф А.И.Бибиковҡа "төрлө көндәрҙә, ғәйептәрен танып, старшиналар Әлибай Мырҙағолов, Ибраһим Мерәсев, Айса Яҡупов һәм Ҡәйеп Зыямбәтов" килеүен хәбәр итә[58]. Шулай итеп, 1774 йылдың яҙында Әлибай тәүгеләр иҫәбендә ихтилалдан тайпыла һәм урындағы властарға ярлыҡау һорап килә. Пугачевтың уны Өфөгә ебәреүе лә быға ни кимәлдәлер булышлыҡ итә. Ул Чесноковкаға барып еткәнсе, уны Пугачев-

тың Татищев ҡәлғәһе һәм Һаҡмар ҡаласығы янындағы һуғыштарҙа еңелеүе хаҡындағы хәбәр ҡыуып етеүе лә ихтимал.

1774 йылдың йәйенә тиклем Әлибай нейтралитет һаҡлай. 1774 йылдың 1 июнендә Нуғай даруғаһы старшиналарының ҙур ғына төркөмө Ҡыҙрас Муллаҡаевтың тәҡдиме буйынса Бөгөлмәгә полковник Н.Н.Кожинға килә һәм язалау ғәскәрҙәренең баш командующийы вазифаһын үтәүсе генерал Ф.Ф.Щербатовҡа рапорт ҡалдыра. Рапортта улар генералды "яуыздарҙы эҙләү өсөн" эшкә тотонорға һәм полковник П.А.Шепелевтың язалау командаһына инергә әҙер тороуҙарына ышандыра[59]. Был старшиналар төркөмөндә Әлибай ҙа була. Әммә 1774 й. йәйендә ихтилалды баҫтырыу эшенә Ҡыҙрас Муллаҡаев ҡына тотона. Әлибай башҡа башҡорт старшиналары менән язалаусылар яғына күсергә ашыҡмай. Мишәр старшинаһы Миндәй Төпәев 1774 й. йәйендә ғәйебен танып килгән Әлибайҙың һәм башҡа башҡорт старшиналарының "тоғролоғона" ышанмай. Өфө провинцияһы канцелярияһына ебәргән рапортында ул "старшиналар Ҡыҙрас, Ибраһим, Айсу һ. б. бер ауылға йыйып, ниәттәрен белеү өсөн йомошсолар ебәрергә" тәҡдим итә, "улар яуыз уй менән йөрөмәйҙәрме икән?", тип борсола.

Шундай уй ысын булған. Батша властарының тәжрибәле ялсыһы көйөк еҫен дөрөҫ тойған. Пугачевтың башҡорт ауылдарында пәйҙә булыуы һәм 1774 й. йәйендә халыҡ хәрәкәтенең яңынан күтәрелеүе был старшиналарҙы яңынан баш күтәреүселәр лагерына алып килә. Тәжрибәле командирҙар булараҡ, улар тағы Нуғай даруғаһы башҡорттарының хәрәкәтенә етәкселек итә башлай. Уларҙың отрядтары генерал П.М.Голицындың Ырымбурҙан Өфөгә табан хәрәкәт итеүенә ныҡышмалы ҡаршылыҡ күрһәтә. 1774 й. июлендә уларҙың 2 мең кешелек ҡатнаш отряды Стәрлетамаҡ пристане янында Голицын корпусына ташлана. Отрядты Әлибай, Ҡәйеп һәм Нуғай даруғаһының башҡа старшиналары, баш күтәреүселәр армияһының полковниктары һәм атамандары етәкләй. Троицк ҡәлғәһе һәм Һаҡмар ҡаласығы янында Пугачевтың Төп ғәскәрен ҡыйратыусы тәжрибәле генерал етәкселегендәге ҡораллы регуляр армияға маңлайға-маңлай һөжүм итеү алымы үҙен аҡламай. Ихтилалсылар ҡурҡыныс еңелеүгә дусар була[60]. Старшиналарҙың бер өлөшө язалаусылар яғына сыға. 17 июлдә Ҡәйеп менән Ибраһим 300 башҡорт яугиры менән Ҡармасан йылғаһында Голицын корпусын ҡыуып етә һәм улар менән бергә Ҡазанға юл ала[61].

Ошо яуҙан һуң Әлибай ихтилалдан тамам ситләшә. 1774 й. йәйендә уның хәле бигерәк ауыр була. Ихтилалсы көрәштәштәре уны үҙ сафтарына ҡайтарып алырға теләй. Өфө провинцияһы канцелярияһының 18 июлдәге рапортынан мәғлүм булыуынса, баш күтәреүселәрҙең етәкселәре "Ҡанбулат менән Ҡотлосура үҙҙәренән башҡорт Исенчюлды тоғро старшиналар Ҡыҙрас, Ҡәйеп, Әлибай һәм Ибраһимға ебәреп, уларҙы үҙ командалары менән ихтилалға ҡушылырға" саҡыра. Ғәскәр ҙурайғас, улар Өфөгә яу асасаҡ[62]. Ҡанбулат менән Төлкөсураның ниәттәре

Ҡәнзәфәр, Салауат, Ҡаранай, Ҡасҡын һәм башҡаларҙың Өфөгә берләштерелгән көстәр менән барыу тураһындағы дөйөм планына тура килә. Башҡорттарҙың киң танылған юлбашсыларын ихтилалсылар лагерына ҡайтарыуға өмөтөн юғалтҡан баш күтәреүселәр уларҙың ”ауылдарын ҡырып сығыу” менән янай[63].

Башҡорт старшиналарының был төркөмөнә власть даирәләре лә бер төрлө генә ҡарамаған. Подполковник Михельсон уларҙың ғәйебен танып килеүенә, ихтилалды баҫтырыуҙа әүҙем ҡатнашасағына ышанһа, полковник Кожин шикләнеп ҡараған. Өфө воеводаһы А.Н.Борисовҡа 1774 й. 26 авгусында яҙған хатында ул Әлибайҙың 200 кешелек командаһы менән ”танылған яуыз башлыҡ Салауатты тоторға йыйыныуын” хәбәр итә. Шул уҡ ваҡытта воеводаға старшина Әлибайҙың дөйөм файҙаға ысын күңелдән тырышыуын күҙәтергә һәм уның яҡшы йәки яуыз ниәттәре, эштәре тураһында үҙенә хәбәр ебәреп торорға ҡуша[64].

Әлибайҙың 1774 й. йәйендәге уй-фекерҙәре Ибраш Ураҙбахтин менән Мәксүт Мырҙаҡаевҡа 26 июндә яҙған хатында асыҡ сағыла. Пугачевтың Ҡазанды алыуы һәм Мәскәүгә барырға йыйыныуы тураһындағы хәбәрҙе ишеткәс, Әлибай ваҡытлыса тынысланырға, халыҡты яңы һуғыш менән борсомаҫҡа тәҡдим итә, сөнки үҙе эшкә тотонған, иген дә өлгөргән, халыҡ иген икһен, ти. Шулай итеп, Әлибай көтөргә, тынысланырға ҡуша. Һәм Ҡәнзәфәр муллаға бер ни тиклем ваҡыт сабырлыҡ төйнәргә күндереп хат яҙыуҙы һорай. Шуның менән бергә Әлибай көрәште дауам итеүҙе тыймай: ”теләһәгеҙ, ҡалығыҙ”, тик ”илде яңынан ҡуҙғатыу ауыр”[65].

Был хатта күп авторҙар Әлибайҙың хыянатсылығын күрә. Әммә бер генә тикшереүсе лә унда Нуғай даруғаһының тәрән тормош тәжрибәһе туплаған баш старшинаһының башҡорт халҡы тураһындағы аталарса хәстәрлеген тойомламай. Әлибайҙың күҙ алдында 30—50-се йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарын рәхимһеҙ баҫтырғандан һуң меңәрләгән башҡорт аслыҡтан ҡырылған. Әлибайҙың 1774 йылдың йәйендәге эшмәкәрлеге лә бер яҡлы ҡарашҡа дусар ителә. Бөтә авторҙар ҙа уны һуғышты баҫтырыуҙа әүҙем ҡатнашыуҙа ғәйепләй[66].

Әлибайҙың 1774 йылдың йәйендәге һәм көҙөндәге хәрәкәттәре үтә ҡапма-ҡаршылыҡлы. Шуға күрә уны бер яҡлы ғына баһалап булмай. Ул баш күтәреүселәр отрядтарына ҡаршы сыҡмаған, язалау командаларына етәкселек итмәгән, хөкүмәт ғәскәрҙәре иҫәбенә инмәгән. Старшиналарҙы һәм ихтилал командирҙарын ғәйебен танып барырға, еңелгән яуҙы туҡтатырға күндереү уның төп эшмәкәрлеге булған. Әлибай Нуғай даруғаһының баш старшинаһы, урындағы батша хакимиәтенең бер вәкиле булыуын онотоорға ярамай. Әлибайҙың был ҡатмарлы хәле Өфө воеводаһы Борисовтың полковник Кожинға 1774 йылдың 3 сентябрендә яҙған хатында тулыһынса һәм ғәҙел асып бирелә: ”Әлибайға билдәле яуыз башлыҡ Салауатты тотоу бурысын йөкмәтеүгә килгәндә, урындағы про-

винция канцелярияһы уға ундай бойороҡ бирмәне". Быndай ышанмаусанлыҡтың сәбәбен воевода июлдә үк Әлибайҙың генерал Голицынға олоҫтарҙан Дим йылғаһы буйлап хеҙмәткә яраҡлы 300 ҡораллы башҡорт ебәрергә вәғәҙә итеүе һәм әлегәсә үтәмәүе менән аңлата һәм, яман эш менән яуыз ниәттәре күҙгә салынмаһа ла, тип өҫтәй[67]. Әлибайҙың хәлен аңлар өсөн уның ерҙәре Өфөгә терәлеп ятҡанын күрһәтеү ҙә етәлер.

Әлибайҙы тамам инандырыу өсөн Ҡазан Йәшерен комиссияһы начальнигы П.С.Потемкин уны ҡулға алынған Пугачевты күрергә Сембергә ебәрә. Екатерина Икенсегә 1774 йылдың 17 октябрендәге хатында Потемкин: "Иң ҙур башҡорт фетнәселәре араһынан уларҙың юлбашсыһы Әлибай ғәйебен танып килде", — тип яҙа. Екатерина Икенсенең үҙе ғәйебен танып килгән ихтилалсыларға амнистия иғлан итеү тураһындағы 1773 йылдың 29 ноябрендә ҡабул ителгән манифесына һылтанып, Потемкин Әлибайҙы хөкөм язаһынан ҡотҡарып, уны алты иптәше менән Сембергә үҙҙәре ышанып хеҙмәт иткән "батшаны" күрһәтеү өсөн ебәрә. Потемкин Әлибайҙың абруйын башҡа башҡорт юлбашсыларын буйһондороуҙа файҙаланырға ниәтләнә. "Әлибай, — тип дауам итә генерал, — ҡәрҙәштәре араһында тәрән хөрмәт ҡаҙанған, яуызды тотоуҙа күп башҡорттарҙы ышандырыр"[68].

Нуғай даруғаһының баш старшинаһы һәм почта комиссары вазифаларын үтәп, Әлибай арыу-талыуһыҙ башҡорт олоҫтары буйлап йөрөй һәм старшиналарҙы урындағы властарға ярлыҡау һорап барырға өгөтләй. 1774 й. ноябрендә Нуғай даруғаһының Әлибай буйһоноуға килтергән 21 башҡорт олоҫо старшинаһының ҡултамғалары ҡуйылған ведомость Ҡазан Йәшерен комиссияһына килеп ята. 1775 й. 9 ғинуарында ихтилалсы старшиналарҙы тәүбәгә килтереү буйынса башҡарылған эш тураһындағы яуап рапорты шул уҡ комиссия өҫтәленә һалына. Ике документ та РГАДА фондында, Ҡазан Йәшерен комиссияһы документтары араһында һаҡлана[69]. Өфө провинцияһы канцелярияһына ғәйебен танып килгән старшиналарҙы Ҡазанға Йәшерен комиссияла тикшереү өсөн ебәрәләр. Әлибай ҙа комиссияға килә, уға Кинйәне, Салауатты һәм Ҡаранайҙы баш күтәреүҙән ваз кисереү һәм Ҡазан Йәшерен комиссияһына тотоп килтереү бурысын йөкмәтәләр[70]. Әлибай хатта Кинйәнең ауылына бара, уның улы Һеләүһенде ҡулға алып, Ҡазанға оҙата[71].

Әлибай оҙайлы ғүмер юлы үтә һәм оҙаҡ йылдар Ҡыркүл-Мең олоҫона идара итә. 1776 йылда ул Нуғай даруғаһы Тамъян олоҫо башҡорттарының Өфө сауҙагәре А.М.Подъячев менән килешеүенә шаһит булып сығыш яһай[72]. Нуғай даруғаһы башҡорттарының 1778 йылдың 27 ноябрендә төҙөлгән заем яҙмаһында Әлибай Нуғай даруғаһы Һарт олоҫо старшинаһы булып ҡул ҡуя[73]. 1780 йылдың 19 февралендәге документта ул йәнә Ҡыркүл-Мең олоҫо старшинаһы булып яҙыла[74]. 1789 йылдың 5 июлендә Өфө провинцияһы канцелярияһында ҡул ҡуй-

ылған алып-һатыу документында Әлибай Нуғай даруғаһы Сөбәй-Мең олоҫо старшинаһы булып телгә алына[75]. 1791 йылдың 30 майындағы һәм 5 июнендәге оҡшаш документтарҙа ул йәнә Ҡыркүл-Мең олоҫо старшинаһы, ә шул уҡ йылдың 30 июлендәге, 1792 йылдың 22 июлендәге һәм 1793 йылдың 20 майындағы материалдарҙа — Мең олоҫо старшинаһы[76].

Шулай итеп, Әлибай ҡорал һәм көс ҡулланмайынса, ҡан түкмәйенсә Башҡортостандың Нуғай даруғаһында баш күтәреүселәр хәрәкәтен туҡтатыуға булышлыҡ итә. Әммә Крәҫтиәндәр һуғышы ҡотолғоһоҙ һуңғы сигенә яҡынлашҡанда, казактар, завод крәҫтиәндәре, илдең рус булмаған халыҡтары ихтилалдан ваз кискәндә, ихтилалды бары тик башҡорттар ғына дауам иткәндә, Нуғай даруғаһы башҡорттарының артабан да ныҡышмалы һәм оҙайлы ҡаршылыҡ күрһәтеүе нимә бирер ине? Үҙенең тыныслыҡ урынлаштырыу эшмәкәрлеге менән Әлибай тиҫтәләгән старшиналарҙы, меңәрләгән ябай халыҡты үлемдән, башҡорт ауылдарын бөлгөнлөктән, талауҙан, янғындан ҡурсып алып ҡалған.

Вариҫтар ата-бабаларының тарихта тотҡан урыны тураһында фекер йөрөткәндә улар нимәне эшләп өлгөрмәүенә ҙур иғтибар бүлергә түгел, ә халыҡ өсөн нимә эшләй алғандары өсөн рәхмәтле булырға тейеш. Был сетерекле мәсьәләгә ысын күңелдән баҡҡанда ғына башҡорттарҙың юлбашсылары батырлығы менән генә түгел, ә фиҙакәр аҡыл менән дә ысын ихтирам һәм һоҡланыу тойғоһона лайыҡ булғанға инанаһың.

## Ҡыҙрас Муллаҡаев

Ҡыҙрас Муллаҡаев Нуғай даруғаһының башҡорт старшиналары араһынан икенсе бер сағыу, әммә ҡатмарлы шәхес булып күҙ алдына баҫа. Крәҫтиәндәр һуғышына тиклем үк ул юғары дан һәм абруй ҡаҙанған кеше була. Ихтилал башланырҙан 35 йыл элек, йәғни 1738 йылда, ул Нуғай даруғаһының Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы вазифаһын үтәй. 1738 йылдың 24 февралендә Ҡыҙрас дүрт даруғаның 31 старшинаһы иҫәбендә башҡорттарҙың Анна Иоанновнаға яҙған ғаризаһына тамғаһын ҡуя[77]. Быға тиклем, 1737 йылдың 3 июлендә, Ҡыҙрас батыр ”иптәштәре менән” рус язалаусыларын рәхимһеҙлектә ғәйепләп, капитан П.А.Батовҡа хат яҙалар[78].

1735—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдары ваҡытында Ҡыҙрас батша хөкүмәтенә тоғролоҡ һаҡлай һәм уларҙы баҫтырыуҙа тырышлыҡ күрһәтә[79]. 1740—1760 йылдарҙа уның исеме башҡорттарҙың аҫаба ерҙәрен керҙәштәргә, дворяндарға һәм завод хужаларына һатыу һәм ҡортомға биреү документтарында йыш осрай[80]. Өфө вице-губернаторы бригадир П.Д.Аксаковтың ғаризаһы буйынса язаға тарттырылған ришүәтселәр араһында ла уның исеме бар[81].

Ҡыҙрас йәне-тәне менән бирелеп батша хөкүмәтенә хеҙмәт итә. 1756 йылда Ете йыллыҡ һуғышта ҡатнашыу өсөн Лифляндияға ебәрелгән 2 меңлек башҡорт командаһының башлығы итеп тәғәйенләнә[82]. Оҙаҡ йылдар Нуғай даруғаһының баш старшинаһы вазифаһын үтәй. Ҡыҙрастың кире яҡтарын ғына иҫкә алһаҡ, ғәҙел булмаҫ ине. Ул П.И.Рычковты башҡорттарҙың иртә быуаттарҙағы тарихы буйынса материалдар менән тәьмин итеп (был беҙҙең илде тәүге өйрәнеүсенең ”Ырымбур тарихы” исемле ғилми хеҙмәтенең нигеҙен тәшкил итә), тарихҡа инә һәм унда тәрән эҙ ҡалдыра.

Крәҫтиәндәр һуғышы башланғанда башҡорттарҙың Пугачев яғына дәррәү күсеүенең йоғонтоһо аҫтында Ҡыҙрас баш күтәреүселәр лагерына барып эләгә. Уның ихтилалға ҡасан һәм нисек ҡушылыуын сығанаҡтар буйынса аныҡ ҡына билдәләп булмай. Ҡәлғәләрҙең Озерный дистанцияһы коменданты бригадир А.И.Корф Ырымбур губернаторы И.А.Рейнсдорпҡа 1773 йылдың 31 октябрендә яҙған рапортында ”Үҫәргән һәм Өфө олоҫо старшиналары Сабыр менән Ҡыҙрас император ғәли йәнәптәренә хыянат итә”, тип хәбәр бирә[83]. Ҡасҡындың баш күтәреүселәр ғәскәрендә Ҡыҙрас Өфөгә табан хәрәкәт итә, ә унан Ҡаранай һәм Нуғай, Ҡазан даруғаһының башҡа башҡорт старшиналары, Пугачев полковниктары Ҡәйеп Зыямбәтов, Ибраһим Мерәсов, Ишҡар Арыҫланов, Моратша Һыртланов, Аслай Күрмәкәев һәм Илсеғол Таймаҫов менән бергә Көнбайыш Башҡортостанға юл ала. 1773—1774 йй. ҡышында уларҙың отрядтары Ҡаранайҙың Минзәлә районындағы ғәскәренең иң әҙерлекле өлөшөн тәшкил итә. Улар Алабуғаны ҡамауҙа тота, Нуғайбәк һәм Баҡалы ҡәлғәләре эргәһендә полковник Ю.Б.Бибиков менән генерал А.Л.Ларионовтың язалау корпустары менән һуғыша[84]. 1774 йылдың яҙында Ҡыҙрас башҡорт старшиналары төркөмө менән ихтилалдан ситләшә. Ырымбур, Өфө, Красноуфимск янында һәм Екатеринбург тау заводтары тирәһендә язалау ғәскәрҙәренең көслө һөжүменән һәм ихтилал көстәренең еңелеүенән тыш, был башҡорт командирҙарының Минзәләләге баш күтәреүселәр лагерын ташлап, язалаусылар яғына сығыуына В.Торновтың тупаҫ мөнәсәбәте лә булышлыҡ итә. Атаман ”күп ғәйепһеҙ кешеләрҙе... һәләк итте, ә ҡайһыларын үлтергәнсе ҡыйнаны”[85], тип һөйләй тарих. 8 апрелдә Ҡыҙрас менән башҡорт старшиналары төркөмө Бишҡурай ауылында 700 кешелек отряд менән Торновтың командаһын ҡырып һала һәм үҙен әсир итә[86].

Ошонан һуң улар батша властарына ғәйебен танып килә[87]. Әммә улар ныҡлы ҡарарҙа булмай — быны властар ҙа һиҙә. ”Тоғро” мишәр старшинаһы Миндәй Төпәев уларҙың ныҡлығын тикшереү өсөн, яуыз ниәт йөрөтмәйҙәрме, тип белешергә йомошсолар ебәрә[88]. Миндәйҙең шикләнеүҙәре юҡҡа булмай. 1774 йылдың йәйендә, халыҡ күтәрелеше яңынан көсәйгәндә, был старшиналар төркөмө йәнә баш күтәреүселәр

лагерына күсә, күпселеге командирҙар булып китә. Уларҙың баш күтәреү эшмәкәрлегенә 5 июлдә һуңғы нөктә ҡуйыла. Был көндө Стәрлетамаҡ пристаненән алыҫ түгел ҡатнаш башҡорт отряды генерал П.М.Голицындың язалау корпусына ҡаршы ҡан ҡойғос һуғышҡа инә[89]. Һуғыш баш күтәреүселәрҙең ҡот осҡос еңелеүе менән тамамлана, башҡорттар ифрат ҙур юғалтыуҙар кисерә. Старшиналар хәрәкәттән тамам ситләшә. Ҡыҙрас менән Ҡәйеп язалаусылар яғына сыға һәм ихтилалды баҫтырыуҙа әүҙем ҡатнаша. Әлибай башҡорт старшиналары араһында ихтилалды туҡтатыу өсөн өгөтләү эшмәкәрлеген башлай. Ибраһим ихтилал юлбашсыларының пландары һәм хәрәкәттәре тураһында урындағы властарға еткереп тороусыға әйләнә.

Көҙ аҙағында улар Ҡазан Йәшерен комиссияһына ебәрелә һәм 1775 йылдың яҙына тиклем Ҡазанда тотола. 1773 йылдың көҙөндә-ҡышында ихтилалда әүҙем ҡатнашыуҙарына, Пугачев армияһының полковниктары булыуҙарына ҡарамаҫтан, улар язаһыҙ азат ителә һәм олоҫ старшинаһы вазифаларында ҡалдырыла[90]. Уларҙың күбеһе 1780—1790 йылдарҙа ла был вазифала эшләүен дауам итә. Ҡыҙрас 1789 йылдың аҙағында ла Ҡара-Табын олоҫоноң баш старшинаһы булып ҡала[91]. Ҡыҙрастың вафат булған йылы мәғлүм түгел. Билдәле сығанаҡтар буйынса ғына ул 52 йылдан ашыу старшина вазифаһын үтәгән.

## Яманһары Яппаров

Нуғай даруғаһының Һун-Ҡыпсаҡ олоҫо старшинаһы, баш күтәреүселәр полковнигы Яманһары Яппаровтың яҙмышы башҡаларҙыҡына оҡшамаған. Ул башҡорт старшиналарынан беренсе булып Пугачевҡа 500 кешелек отряды менән килә[92]. 1773—1774 йылдарҙың ҡыш айҙарын ул Берда лагерында үткәрә, Әлибай менән бергә Кинйәгә күп меңлек башҡорт полкына етәкселек итергә ярҙамлаша. Пугачев уға полковник чинын бирә. Ул Ырымбур эргәһендәге барлыҡ һуғыштарҙа ла ҡатнашҡандыр, тип уйларға кәрәк, әммә ”батшаға” әллә ни бирелеп хеҙмәт итмәй һәм артыҡ тырышлыҡ та күрһәтмәй.

1774 йылдың яҙында, Төп ғәскәр Татищев ҡәлғәһе һәм Һаҡмар ҡалаһығы янында еңелгәс, Яманһары беренселәрҙән булып баш күтәреү хәрәкәтенән ситләшә һәм хөкүмәт ғәскәрҙәре яғына сыға. 1774 йылдың 4 апрелендә генерал Голицынға яҙған рапортында ул, 300 кешелек команда йыйып, улдары Кейекбай менән Үҙәнбай командалығында ҡасҡын Пугачевты эҙәрлекләргә ебәреүен яҙа. Яманһары үҙе И.Л. Тимашевтың командаһына инә[93].

1774 йылдың йәйендә хәрби властар Яманһарының, биргән антын боҙоп, баш күтәреүселәр яғына сығыуы тураһында хәбәр ала. Генерал Ф.Ф.Щербатов губернатор Рейнсдорпҡа 25 июлдә ебәргән рапортында уның хыянатын ауыр кисереүе тураһында асыу менән яҙа. ”Уның тәүбәгә

килеүенә шикләнерлек тә түгел ине һымаҡ, — тип яҙа генерал, — сөнки улын иң яҡшы башҡорттар менән генерал-майор кенәз Голицында тоғролоғона аманат итеп ҡалдырғайны". Тарихсы И.М.Гвоздикова, яңы табылған архив сығанаҡтарына таянып, хөкүмәт ғәскәрҙәренең баш командующийы генерал-поручик Щербатов яңылышҡан, тип иҫәпләй. Яманһары властарға хыянат итмәгән һәм баш күтәреүселәр яғына сыҡмаған, уны Кинйәнең улы Һеләүһен әсир итеп алған[94]. Әммә ул тотҡондан ҡасҡан һәм яңынан ихтилалға ҡаршы торған.

1774 йылдың көҙөндә Яманһары 21 старшина иҫәбендә Ҡазан Йәшерен комиссияһына килә һәм 1774 йылдың декабрь аҙағына тиклем тикшереү үтә[95]. Бик аҙ ғына "тоғро" башҡорт старшиналары иҫәбендә ул колодниктар реестрына инмәй, Ҡазанда фатирҙа йәшәй. Йәшерен комиссияның ҡарары буйынса Яманһары язаһыҙ иреккә ебәрелә һәм Нуғай даруғаһының Һун-Ҡыпсаҡ олоҫо старшинаһы вазифаһында ҡалдырыла[96].

Шулай итеп, Нуғай даруғаһы башҡорттары 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында берҙәм ҡатнашҡан. Улар араһынан бер төркөм күренекле юлбашсылар үҫеп сыҡҡан. Крәҫтиәндәр һуғышының танылған полководецтары Кинйә Арыҫланов, Ҡасҡын Һамаров, Ҡаранай Моратов шулар иҫәбендә. Ихтилалға тоғролоҡ һаҡлап, 1774 йылдың ҡара көҙөнә тиклем көрәште һүндермәй дауам итеүсе Пугачев полковниктары Һеләүһен Кинзин, Ҡотлогилде Абдрахманов, Төркмән Йәнсәйетов, Ҡанбулат Юлдашев, Турай Ишәлин, Буҙан Аҙмаҡов була. Нуғай даруғаһы башҡорттарынан Пугачев полковниктарының айырым төркөмөн Яйыҡ казактары Иҙеркәй Баймәков һәм Балтай Иҙеркәев, Нарынбай һәм Аҡмырҙа тәшкил итә.

Нуғай даруғаһының Өфөгә яҡын ҙур ғына биләмәләре ҡатнаш хужалыҡ алып барыу төбәгенә ингән, унда игенселек алға китә башлаған. Ҡатнаш төбәктә йәшәүсе башҡорттарҙың идара итеүсе феодал-старшина юғары ҡатламы юлбашсы — олоҫ хакимы булыуын дауам иткән. Әммә башҡорт йәмғиәтендә феодаль мөнәсәбәттәрҙең үҫеше старшиналар ҡатламының рус хөкүмәтенә яҡынайырға ынтылыуы менән тәьмин ителгән. Шуға күрә Крәҫтиәндәр һуғышында тотороҡһоҙ, көстәр үҙгәреүенә ҡарап икеләнеүсе бер төркөм старшиналар пәйҙә булған. Халыҡ хәрәкәте күтәрелгәндә улар баш күтәреүселәр лагерына күскән һәм үҙ олоҫо башҡорттарының отрядтарына етәкселек иткән. Хәрәкәт һүлпәнәйеү менән ихтилалдан ситләшкән, сөнки Өфөгә яҡын йәшәү, биләмәләре оло юлда ятыу сәбәпле, хәлдәре сикһеҙ ауырлаша. Нуғай даруғаһы башҡорт старшиналары араһынан был төркөмгә Әлибай Мырҙағолов, Ҡыҙрас Муллаҡаев, Ҡәйеп Зыямбәтов, Ибраһим Мерәҫев, Яманһары Яппаров, Аслай Көрмәнкәев, Илсеғол Таймаҫов һәм башҡалар ингән. Ләкин улар, һис шикһеҙ, Крәҫтиәндәр һуғышының башланғыс осоронда ҙур урын тотҡан.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Пугачевщина. Сборник документов. Т. 1—3. М.; Л., 1926—1932.

2. Восстание Емельяна Пугачева. Сборник документов. Составитель и ответственный редактор М.Н.Мартынов. Л., 1935.

3. Крестьянская война 1773—1775 гг. в России. Сборник материалов Рукописного фонда ГИМ. Отв. ред. Е.И.Индова. М., 1973.

4. Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии. Сборник документов и материалов. Отв. ред. Р.В.Овчинников, Р.Г.Кузеев. Уфа, 1975.

5. Документы Ставки Е.И.Пугачева, повстанческих властей и учреждений. Отв.ред. Р.В.Овчинников. М., 1975.

6. Воззвания и переписка вожаков пугачевского восстания из народов Поволжья и Приуралья. Отв. ред. М.А.Усманов. Казань, 1988.

7. Андрущенко А.И. Крестьянская война 1773—1775 гг. на Яике, в Приуралье, на Урале и в Сибири. М., 1969.

8. Очерки по истории Башкирской АССР. Т. 1. Ч. 1. Уфа, 1956.

9. Гвоздикова И.М. Салават Юлаев. Исследования документальных источников. Уфа, 1982.

10. Гвоздикова И.М. Башкортостан накануне и в годы Крестьянской войны 1773—1775 годов под предводительством Е.И.Пугачева. Уфа, 1999.

11. Алишев С.Х. Татары Среднего Поволжья в Крестьянской войне под предводительством Е.И.Пугачева. Уфа, 1999.

12. История Башкортостана с древнейших времен до 60-х годов XIX в. Отв.ред. Х.Ф.Усманов. Уфа, 1995.

13. Кулбахтин Н.М. Участие башкирского народа в Крестьянской войне 1773—1775 гг. Учебное пособие. Уфа, 1984.

14. Крестьянская война в России в 1773—1775 гг. Восстание Пугачева. Отв. ред. В.В.Мавродин. Т. 1—3. М.; Л., 1961—1970.


## ИҪКӘРМӘЛӘР

[1] Крестьянская война 1773—1775 гг. 57-се б.

[2] Крестьянская война. 57—58-се бб.

[3] Южно-Уральский археографический сборник. Вып. 1. Өфө, 1973. 310-сы б.

[4] РГВИА. Ф. 20. Д. 4. Л. 284—285 об.; Пугачевщина. Т. 1. 45, 145—147, 157-се бб.

[5] Андрущенко А.И. Күрһ. хеҙм. 141-се б.

[6] РГАДА. Ф. 1100. Д. 9. Л. 531а и об.; Крестьянская война. 399-сы б.

[7] Крестьянская война. 286-сы б.

[8] РГАДА. Ф. 1274. Оп. 1. Д. 196. Л. 129 об.

[9] Крестьянская война. 55-се б.

[10] Шунда уҡ. 70—171-се бб.

[11] Шунда уҡ. 177—179-сы бб.

[12] Шунда уҡ. 246—247-се бб.

[13] РГАДА. Ф. 6. Д. 507. Ч. 3. Л. 79—82 об.
[14] Шунда уҡ. Ф. 1274. Оп. 1. Д. 196. Л. 129 и об.
[15] Шунда уҡ. Ф. 6. Д. 507. Ч. 3. Л. 166 об. —169.
[16] Әхтәр Тимерйәр. Ҡарағай-ҡыпсаҡтар. Өфө, 2004. 72-се бит.
[17] Крестьянская война. 57-се б.
[18] Шунда уҡ. 67-се б.
[19] Шунда уҡ. 69-сы б.
[20] Шунда уҡ. 71, 355-се бб.
[21] Шунда уҡ. 214-се б.
[22] РГАДА. Ф. 1100. Д. 9. Л. 555.
[23] РГАДА. Ф. 6. Д. 507. Ч. 3. Л. 241 об. —242
[24] Шунда уҡ. Л. 492 об.
[25] Шунда уҡ. Ф. 1100. Д. 9. Л. 531.
[26] Крестьянская война. 412, 414-се бб.
[27] РГАДА. Ф. 6. Д. 507. Ч. 3. Л. 65 об.
[28] Документы Ставки. 35—36, 55, 57—58, 379—380, 392—393-сө бб.; Крестьянская война. 66, 67, 70—72, 353, 354—355-се б.
[29] РГАДА. Ф. 1100. Д. 9. Л. 531а и об.
[30] Крестьянская война. 214—215-се бб.
[31] Шунда уҡ. 215-се б.
[32] Шунда уҡ. 221—222-се бб.
[33] Крестьянская война. 214-се б.
[34] РГАДА. Ф. 1100. Д. 9. Л. 553.
[35] Шунда уҡ. Л. 555.
[36] РГАДА. Ф. 1100. Д. 9. Л. 376—377.
[37] Крестьянская война. 246—247-се бб.
[38] РГАДА. Ф. 507. Ч. 3. Л. 79—82 об.
[39] Шунда уҡ. Л. 39, 65 об., III об. —124, 166 об. Ч. 5. Л. 28 об.,175—179 об.; Д. 512. Ч. 2. Л. 188—195; Ф. 1274. Оп. 1. Д. 196. Л. 129 об. һ.б.
[40] Материалы. Ч. 1. 314-се б.
[41] Шунда уҡ. Т. IV. Ч. 2. 36—37-се бб.
[42] Шунда уҡ. 36-сы б.
[43] Гвоздикова И.М. Башкортостан накануне и в годы Крестьянской войны. Өфө, 1999. 198-се б.
[44] Шунда уҡ. 199-сы б.
[45] РГАДА. Ф. 1100. Д. 2. Л. 251—252; Архив ЛОИИ. Ф. 113. Д. 60. Л. 115. Допрос Е.И.Пугачева. 198-се б.; Восстание Емельяна Пугачева. Л., 1935. 143-сө б.
[46] Допрос Е.И.Пугачева в Тайной экспедиции Сената в Москве.
[47] Крестьянская война. 22-се б.
[48] Документы Ставки. 30-сы б.
[49] Крестьянская война. 39-сы б.
[50] Крестьянская война. 42-се б.
[51] Шунда уҡ. 416-сы б.
[52] Шунда уҡ. 300-сө б.
[53] Шунда уҡ. 51-се б.
[54] РГАДА. Ф. 6. Д. 507. Ч. 4. Л. 217.

[55] Крестьянская война. 118—119-сы бб.
[56] Овчинников Р.В. Күрһ. хеҙм. 209-сы б.
[57] Шунда уҡ.
[58] Крестьянская война. 124-се б.
[59] Шунда уҡ. 170—171, 383-сө бб.
[60] Крестьянская война. 205—207, 216—217-се бб.
[61] Шунда уҡ. 217, 399-сы бб.
[62] РГВИА. Ф. 20. Д. 1239. Л. 555.
[63] Крестьянская война. 214—215-се бб.
[64] Шунда уҡ. 225—226-сы бб.
[65] Шунда уҡ. 122-се б.
[66] Андрущенко А.И. Күрһ.хеҙм. // 302, 304, 306-сы бб.; Усманов Ә.Н. Күрһ. хеҙм. 132—133-сө бб.; Гвоздикова И.М. Күрһ. хеҙм. 150-се б.
[67] РГАДА. Ф. 6. Д. 593. Л. 10 и об.
[68] РГАДА. Ф. 6. Д. 489. Л. 157 об.
[69] Шунда уҡ. Д. 507. Ч. 3. Л. 78—90.
[70] Шунда уҡ. 78 и об.
[71] Шунда уҡ.
[72] Материалы. Т. V. 31-се б.
[73] Шунда уҡ. 79-сы б.
[74] Шунда уҡ. 103-сө б.
[75] Материалы. Т. V. 157-се б.
[76] Шунда уҡ. 304—306, 307—308, 320—321, 327—328-се бб.
[77] Шунда уҡ. Ч. 1. 144—145-се бб.
[78] Шунда уҡ. 314—315-се бб.
[79] Шунда уҡ. 339—340, 341—347-се бб.
[80] Материалы. Т. III. 427-се б.; Т. IV. Ч. 1. 233, 270, 288-се бб.; Ч. 2. 29, 39, 45, 208—212, 279, 288-се бб.
[81] Шунда уҡ. Т. III. 548-се б.
[82] Шунда уҡ. Т. IV. Ч. 2. 499—500-се бб. Документта уның был вазифаны үткән йылдарҙа ла үтәүе һыҙыҡ өҫтөнә алына.
[83] Крестьянская война. 44-се б.
[84] Документы Ставки. 118—119-сы бб.; Крестьянская война. 199, 385-се бб.; Андрущенко А.И. Күрһ. хеҙм. 145—147-се бб.; Крестьянская война в России. Т. II. 234—236-сы бб.; Гвоздикова И.М. Күрһ. хеҙм. 358—360-сы бб.
[85] Крестьянская война. 127-се б.
[86] Шунда уҡ.
[87] Крестьянская война. 124-се б.
[88] РГАДА. Ф. 6. Д. 592. Л. 252.
[89] Крестьянская война. 205—208, 396—397-се бб.
[90] РГАДА. Ф. 6. Д. 507. Ч. 3. Л. 166 об.—169 об.
[91] Материалы. Т. V. 268-се б.
[92] Шунда уҡ.
[93] РГВИА. Ф. 20. Д. 1232. Л. 407.
[94] Гвоздикова И.М. Күрһ. хеҙм. 416-сы б.
[95] РГАДА. Ф. 6. Д. 507. Ч. 3. Л. 79—82 об.
[96] Шунда уҡ. Л. 166 об.—171 об.